8 Июль – Ғаилә мөхәббәт һәм тоғоролоҡ көнө. Йәшлек хистәрен һүрмәй яңы ғына өйләнешкән кеүек, бер – береһенең күҙенә генә ҡарап , бер – береһенең мөнәсәбәтен күреп, яратышып өйләнешкәндәр генә шулай йәшлек хистәрен һүрелтмәй йәшәйҙәр ҙә йәшәйҙер!



Ҡотлошина Әлфиә апай менән  Салауат ағай нисәмә йыл инде бергә татыу ғүмер кисерәләр. Ике ҡыҙ, ике ул үҫтерҙеләр. Әлфиә Рәүл ҡыҙы матур йырлай, фольклор ансамбленда йөрөй һәм бауырһаҡ бешереү буйынса бик оҫта. Күгәрсендәр кеүек парлашып  доньяның төрлө ерҙәрендә ял итергә  яраталар.



Кинзябулатовтар ғаиләһе.  Элза Салауат ҡыҙы менән Минеүәле Әхмәтғәли улы татыу ғүмер итеп ике береһенән- береһе һылыу ҡыҙҙар үҫтереп башлы күҙле иттеләр (әйткәндәй икеһелә “Стәрлекәй”  бейеү коллективында бейеп сыҡҡан ҡыҙҙар). Ике ейәнсәрҙәре лә бар. Матур тормошта йәшәйҙәр алар Элза Салауат ҡыҙы  сәскәләр үҫтерергә, бейей ҙә, йырлай ҙа театрҙа ла уйнай ,ғөмөмән ҡулынан килмәгән эше юҡ .







Хайбуллиндар ғаиләһе иңдәрен- иңгә терәп донья ҡороп сибәр һомғол бер ҡыҙ үҫтерәләр. Илнара уҡыуы буйынса беренселектә төрлө олимпиадаларҙа ҡатнаша бейей. Роза Байрамғол ҡыҙы театр артискаһы итеп таныҡкан да инде, уның уйнағанын һәр бер тамашасы көтөп ала. “Бишҡама” фольклор ансамбленың бейеүсеһе.





Ишберҙиндар ғаиләһе -  бейеүсе ғаилә . Икеһелә стәрлетамаҡ ағартыу техникумын уҡып сығалар һәм матур ғаилә ҡороп йәшәй башлайҙар, бер ҡыҙ ике игеҙәк ул үҫтерәләр. Йәш булыуға ҡарамаҫтан яңы өй һалып сығалар. Разалия, Азамат, Салауат атай әсәйгә оҡшап бейеү түңәрәгендә йөрөйҙәр. Светлана Рәмил ҡыҙы “Бишҡама” фольклор ансамбленың солисткаһы.



Насыровтар ғаиләһе  спорт һөйөүсе ғаилә. Татыу, тыныс, мул тормошта йәшәйҙәр улар. Бер ул ике ҡыҙ үҫтерәләр. Улдары аталарына оҡшап көрәш ярата ул ,ә ҡыҙҙары бейеүсе. Гөлнур  театрҙа уйнарға ярата һәм һәр бер сараларҙа әүҙем ҡатнаша. “Бишҡама” фольклор ансамбле бейеүсеһе.





Ҡотлошиндар ғаиләһе Гөлнара менән Дамир матур итеп иңдәрен- иңгә терәп донья көтә. Күркәм йорт төҙөп сыҡтылар. Бер ҡыҙ ике ул үҫтерәләр. Ынйыы менән Даниль бейеү түңәрәгендә шөғөлләнә. Әсәләре Гөлнара бик талантҡа бай оҫта алып барыусы ,йырлай ҙа театрҙа ла уйнай һәм әлбиттә бик матур бейей,  ансамблдың солисткаһы.





Денисовтар Ғаиләһе йәш булыуға ҡарамаҫтар бик матур донья көтәләр.  Бер ҡыҙ бер малай үҫтерәләр. Ҡыҙҙары Яна әсәһенә оҡшап бейергә ярата, бик матур йырлай. Һәр бер конкурстарҙа ҡатнашып бара. Ләйлә Рәмил ҡыҙы оҫта ҡуллы бәйләм , сигергә, һүрәт төшөрөргә ярата ,ихласл күңелдән театрҙа уйнай ул.



# “Бишҡама” фольклор ансамбле Иҫке Ҡалҡаш мәҙәниәт йорто



Һәр беребеҙҙең ғаиләһенә татыулыҡ, тоғролоҡ мөхәббәт теләйем, һәр эшегеҙ уңышлы, киләсәк көндәрегеҙ яҡты булһын!!!

